*Фәнил КҮЗБӘКОВ*

# Һин тыуғанһың, әсәй, көҙ айында

Һигеҙ бала тәрбиәләп үҫтергән
ҡәҙерле әсәйем
Зәйнәп Әбүталип ҡыҙына бағышлайым

Һин тыуғанһың, әсәй, көҙ айында —
Ниндәй көндө?
Бер кем яҙмаған.
Ул дәһшәтле Ун етенсе йылда
Халыҡ иләү кеүек ҡайнаған —
Ҡәләм түгел, ҡылыс ҡармаған!

Иҫке йорттоң серек нигеҙҙәре
Үҙлегенән төшкән ишелеп.
Шуғалыр ҙа, яңы тормош тиеп,
Дәррәү тороп баҫҡан кешелек.

Сыуалыштар киткән... Ҡыҙыл, ағы...
Ике яҡтан алған ҡыҫымға.
Урмандарға ҡасҡан йәшелдәре
Йылан булып шыуған, ыҫылдап.

«Ер һеҙҙеке!» —
тигәс большевиктар,
Башҡорт ҡалҡҡан ҡыҙыл яу булып;
Бер бирелгән антҡа тоғро ҡалған,
Торһалар ҙа ағыу тамыҙып.

«Ил ни күрһә, уның менән бергә —
Тик Советтар ғына йәшәһен!...»
Уландарҙы ир еткерәйем тип,
Әсе тир түккәнһең, әсәйем.

Бил дә яҙмай йәйен,
ҡышын, көҙөн...
Ниндәй түҙем кәрәк?! Йә, Хоҙай!
Маҡтау әйтәйем тип ауыҙ асһам,
Иңрәү генә килеп сығырҙай.

Инде тормош бер аҙ бөтәйгәндәй,
Беҙҙә лә бит байрам тигәндә —
Ҡара афәт ҡояш байышынан
Ҡанлы балта менән киҙәнгән.

Һыйыр егеп, һабан тарта-тарта,
Ураҡ менән урып арышын,
Еңеү көнөн яҡынайтышҡанһың,
Алдынғыһы булып ярыштың.

Атай ҡайтҡан, уттар-һыуҙар кисеп,
Сайҡалһа ла ауыр яранан,
«Еңеү өсөн!» тигән бер миҙалын
Күлдәгеңә алып ҡаҙаған.

Еңеүҙән һуң еңеллектәр генә
Килмәгән шул тулып, алҡынып, —
Иртән йылытһа ла, әңер төшкәс,
Електәргә үткән һалҡыны.

Тик үҙеңде кәмһетелгән итеп
Тойманың һин бер ҙә, әсәйем,
Хеҙмәттән йәм табып тәкрарланың;
«Елдәр генә дауыл сәсмәһен.
Иҫән генә булһын бала-саға,
Имен генә торһон ҡитғалар...»

Һин тыуғанһың алтын көҙ айында...

*Фәнил Күзбәков — Башкортостандың һәм Рәсәйҙең яҙыусылар, журналистар Союзы ағзаһы, филология фәндәре докторы. Бер нисә шиғырҙар йыйынтығы, ғилми хеҙмәттәр авторы. Оҙак йылдар Башкорт дәүләт университетында эшләне. Әлеге мәлдә Башкортостан мәғарифты үҫтереү институты ректоры.*

*Фәнил Күзбәков шиғриәтенә халкының тарихи үткәне менән бөгөнгөһөн тығыҙ берлектә карарға ынтылыу хас. Фекерләүҙәге образлылык, һүрәтләүҙәге киң күренешлелек һығылмалы, һутлы тел укыусы күңелендә бай тәьҫораттар тыуҙыра, осорҙоң катмарлы проблемаларына бәйле борсолоуҙар уйланырға мәжбүр итә.*



## Рух һаҡлар ҡәлғәм — шәжәрәм

Тамырҙарым тәрән,
Рухты һаҡлар ҡәлғәм,
Хәтер генә төбөм — шәжәрәм...
Улан ғына көйө
Индә ил-йорт йөгө —
Меңйыллыҡтар кисеп йәшәрәм.

Нәҫел ебем осон
Ныҡлы тотҡан өсөн
Быуаттарҙан ҡарай Ҡарабай.
Ҡуҙыйкүрпәс аша
Ете ырыу ҡалҡа
Зат-зәүерем ҡалын — тарбағай.

Ил ағаһы Шаҡман
Янын кирә тартҡан,
Мәскәү тарафына ҡуҙғалған.
Уҙған юлдарында,
Йылдар ыҙанында
Мәңге һүнмәҫ тере ҡуҙ ҡалған.

Баҫҡынсылар баҫһа —
Киҫһә, сәнсһә, аҫһа —
Тотош ил әйләнгән усаҡҡа.
«Ташҡайҙарға ырып,
Яҙҙым ҡарғыш —
Ейәндәрем уҡыр бер саҡта...»

Ҡара күмер генә...
Көлөн ел һеперә —
Тирмә нигеҙендә ҡуҙ баҙлай.
Инрәй башҡорт иле —
Биртенмәҫме биле?
Ҡаяташтар сатнай — түҙалмай.

Шул ҡуҙҙарҙы алып,
Көнөн-көйөн табып,
Мал үрсеткән йүнсел Ҡуҙыбәк.
Йыр-моңдан туҡылған,
Тәңренән ҡот йыйған, —
Ожмахтарға оҡшаш был төбәк.

Тағып уҡ-һаҙағын,
Француз-ҡырғын яуын,
Амангилде атлы олатай
Парижғаса ҡыуған,
Сенала бит йыуған —
Бөркөттәрен көткән Торатау.

Көмөш миҙал сыңын,
Һәм «Любизар» йырын
Исәнгилде үҫкән ишетеп.
Атайҙарҙың данын,
Шанлы йылдар заңын
Хәтерләгән һәр саҡ түш киреп.

Ҡурайҙа уйнаған,
Бәйет-йыр сығарған
Ураҙгилде — моңло уҙаман.
Бала-саға баҡҡан,
Ҡаҙанға ҡуҙ тартҡан,
Йола-ҡанундарҙы боҙмаған.

Буталыштар киткән,
Аҡ-ҡыҙылдар үткән —
Ауырлығы башҡорт иңендә.
Абыҙ олатайым...
Яҙмыш — ҡалайтаһың?!
Ҡан да, дан да, нам да — иleңдә.

Яугирлығы менән,
Мал йәнле Тимерйән
Ырыҫлаған ырыу ағасын.
Йорто тупһаһына —
Ҡотло утрауына
Ҡаҡҡан арғымаҡтар дағаһын.

Быуындарҙы барлап,
Төп тамырҙы юллап,
Яҙҙым нәҫел-нәсәп тарихын.
Онотмаһаң ине:
Көсһөҙ ваҡыт еле —
Хәтерләләр өсөн, вариҫым.

Маҡсатың уйылһа,
Йондоҙоң юйылһа,
Тауыш килер ерҙән, ғәләмдән.
Мотлаҡ ишетерһең —
Беләм, иш итерһең:
«Рухты һаҡлар ҡәлғәң — шәжәрәң!»

